*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# ЙОНДОҘ ЮЛЫ



Учалы — теҙелеп киткән киртләс-киртләс тауҙар, түңәрәк зәңгәр күлдәр, ҡуйы урмандар төбәге. Уны «моңло яҡ, нурлы яҡ, ҡайынлы яҡ» тип тә йөрөтәләр. Күптәр өсөн ул таланттар төйәге лә.

Башҡортостандың халыҡ артисткаһы, республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Нәзифә Ҡадирова ошо төбәк ҡыҙы. Һылыу, тәүәккәл, ҡыйыу булыуы менән сәхнәгә сығыуының тәүге көндәренән үк үҙ тамашасыһын тапҡан йырсы ул. Ижади ғүмере лә өҫ тиҫтә йылға тулып килә.

Йырҙары үҙе кеүек матур ҙа, моңло ла. Ҡатын-ҡыҙ яҙмышы, әсә йөрәге кисергән әрнеү-ғазаптар, мәңгелек тема — мөхәббәт хаҡында улар. Бәхет, һағыш, шатлыҡ һәм ҡайғы барыһы бергә сорналған.

— Беҙ тынғыһыҙ дәүерҙә йәшәйбеҙ. Әле унда, әле бында һуғыш уты сығып тора. Күпме йәш ғүмер өҙөлә, ғәзиз әсәләрҙең күҙ йәштәре түгелә. Былар барыһы ла йырсы күңеле аша үтә, йөрәгендә, күңелендә даръялай тулышып, моң булып тышҡа бәреп сыға. Тик ошо саҡта ғына йыр башҡалар күңеленә барып етә, уларҙы уйландыра, йырсы менән бергә шатланырға йәки ҡайғырырға мәжбүр итә, — ти Нәзифә Йәүәт ҡыҙы. — Йыр сәнғәтенә һөйөү әсәйемдән күскәндер ул миңә. Әле лә, йәше 70-кә етеп барыуға ҡарамаҫтан, тауышы һис тә боҙолмаған, саф тембр менән йырлай. Беҙҙең Учалы яҡтарында йырламаған кеше юҡтыр ул. Тыуған яҡтың иҫ китмәле матур тәбиғәте үҙе үк күңелдәргә моң, дәрт биреп, йырларға әйҙәп тора һымаҡ.

Нәзифәнең профессиональ йырсы булып формашыуына йыр дәрестәре уҡытыусыһы Саимә Фазылова ла булышлыҡ итә. Уның кәңәше буйынса Нәзифә Өфөләге сәнғәт училищеһына уҡырға керә.

Нәзифә, үҙенең һөйләүе буйынса, ғәҙәттә эске кисерештәренә тап килгән йырҙарҙы һайлай. Композиторҙарҙан бигерәк тә яҡташтары Абрар Ғабдрахманов менән Салауат Низаметдиновтарҙың ижады күңеленә яҡын.

Уның һәр сығышы биҙәлеше, костюмдар төрлөлөгө, уларҙың бер береһенә айырылғыһыҙ бәйле булыуы менән айырыла.

Һәр кешенең үҙенә генә хас холоҡ-фиғеле булған кеүек, йырсының концерттары ла бер-береһен ҡабатларға тейеш түгел. Улайһа, былай ҙа тамашаларға аҙ йөрөгән халыҡ бөтөнләй килмәҫ ине. Йырсының хыялы — зал тулы тамашасы йыйыу. Ул ғына ла түгел, һинең киләһе сығыштарыңды ла көтөп алһындар. Нәзифә ул яҡтан бәхетле. Уның концерттарында зал тулы яратҡан тамашасылары. Нәзифә Йәүәт ҡыҙы һәр йырын үҙе бер тамаша итергә тырыша. Мәҫәлән «Йәшлегем кистәре» йыры өсөн ул махсус рәүештә XIX быуат — яҙыусы А.П.Чехов йәшәгән, ижад иткән йылдарҙа модала булған күлдәк тектерә, зонт эшләтеп, шул осор мөхитен кәүҙәләндерергә тырыша. Йырҙы башҡарғанда ла шул дәүерҙе күҙ алдына килтерергә тырыша.

Нәзифә Ҡадированың һуңғы йылдарҙағы концерт программалары, нигеҙҙә, театрлаштырылған тамашаны хәтерләтә...

— Был минең күптәнге хыялым, — ти ул. — Хәтерләйһегеҙҙер, 1980 йылда «Тормошта йыр менән» Бөтә Союз конкурсында ҡатнашҡанда минән: «Ниндәй хыял менән йәшәйһегеҙ?» — тип һорағас, мин: «Оҫта музыка етәксеһе менән эшләргә теләйем», — тигәйнем. Байтаҡ йылдар үткәс ошо хыялым тормошҡа ашты. Режиссер Ғәли Алтынбаев менән бергә эшләүе бик тә отошло булды. Оҫта режиссер ғына түгел, зауыҡлы, дәртле, табыштарға бай кеше. Хыялдың ысынбарлыҡҡа әүерелеүенә сикһеҙ шатмын.